*Лира-Әхмәт* ***ЯҠШЫБАЕВА***

# Муллаҡай мәҙрәсәһе — сәсәнлек мәктәбе

*Һуңғы осорҙа “Урал батыр” эпосының бөтә төрки халҡы араһында киң билдәлелек яулауы халҡыбыҙ өсөн ҡыуаныслы хәл.*

*Мин ғилми эш менән шөғөлләнмәйем, шулай ҙа эпостың яҙылыу тарихы хаҡында ҡайһы бер уй-фекерҙәрем, асыҡлай алған мәғлүмәтем бар.*

*“Башҡорт халыҡ ижады” китабында: “Егерменсе быуат башында башҡорт эпосы әҫәрҙәрен яҙып алыуҙа Мөхәмәтша сәсән Бурանғоловтың хеҙмәте бик ҙур. Ул 1910 йылда Ырымбур губернияһы Этҡол волосе Идрис ауылының мәшһүр ҡурайсыһы Ғәбит сәсәндән, Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Хәмит сәсәндән “Урал батыр” эпосын яҙып ала”, — тиелгән. Мәшһүр эпостың яҙылыу тарихы ошоноң менән тамамлана. Ҡайһы ғына китапҡа баш һуҙҙе алып ҡараһаң да, барыһында ла фәҡәт ошо юлдар ғына теркәлгән. Ә бит эпостың кәмендә өс мең йыллыҡ тарихы бар, тибеҙ. Бында уйланырға урын етерлек. Ғәбит сәсән Арғынбаев менән (1856—1921) Хәмит сәсән Әлмөхәмәтов (1861—1923) бынан бер быуат ярым элек кенә тыуып, үткән XX быуатта йәшәгән кешеләр, ул эпосты ҡайҙан, кемдән һәм нисек белгән? Мин был турала бер ҡайҙа ла, бер ниндәй ҙә мәғлүмәт осратҡаным юҡ. Ә бына “Ғабдулла Сәйеди” тигән әҙәби-документаль повесты яҙғанда миңә ҡайһы бер нәмәләр асыҡланды. Шул әҫәрҙән бер өҙөктө “Ватандаш” уҡыусыларына тәҡдим итмәксемен.*

*Ғабдулла Сәйеди хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп китеү кәрәктер. Ғабдулла бин Сәйет әл-Болғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари (1836—1914) үҙ заманының иң белемле шәхестәренән иҫәпләнә. Ул башланғыс белемде Муллаҡайҙа ала. Артабан һигеҙ йыл Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡый. Белемен камиллаштырыу өсөн Бохара яҡтарына юллана: унда Чор-Минор, Мири-Араб, Күкелдаш мәҙрәсәләрендә дүртәр йыл уҡый. Йәмғеһе егерме өс йыллап ғилем эстәй. Ул энциклопедик белемгә эйә феноменаль шәхес була. Илен, халҡын яратҡан, юғары кимәлле ғалим халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһынмай ҡалмаҫ. Үҙе лә шиғырҙар яҙған, әҙәби ижадҡа иғтибар биргән ишан үҙ мәҙрәсәһендә үҙенсәлекле Сәсәнлек мәктәбе булдыра, сәсәндәр йыйындары йыя. Мәҙрәсә шәкерттәре араһынан күренекле һүҙ оҫталары, маҫәлән, Ғәбит сәсән, Шәһәрғазы сәсән, шағир Закир Рәмиев сыҡҡан.*

*Ғабдулла Сәйедиҙең шәкерте Нәүширүән Мәһәҙиев 1916 йылда Ырымбурҙа үҙе һигеҙ йыл буйы уҡыған (1872—1880 йылдар) мәҙрәсә*

*тураһында “Муллаҡай” тигән китап сығара. Уның яҙмалары буйынса, хәлфәләр бында шәкерттәренә күп яҡлы белем бирә. Шулай уҡ әҙәби ижадҡа иғтибар ҙур була, сәсәнлеккә өйрәтәләр, халыҡ ижадын йыйып өйрәнәләр. Совет заманынан ҡалған фекер буйынса иһә, йәнәһе, мәҙрәсәлә йүнләп уҡытмағандар, унан наҙан булып сыҡҡандар. Һәм был фекер һаман йәшәп килә. Был хәл ысынбарлыҡты тулыһынса боҙоп күрһәтә. Мәҙрәсәләрҙә, дини белемдән тыш, донъяуи фәндәр ҙә өйрәнелгән, ныҡлы, төплө, күп яҡлы белем бирелгән. Быны шул заманды ентекләп өйрәнгән, Ғабдулла Сәйеди, Мөжәүир хәҙрәт, Әбйәлил ишан, Сабир әүлиә, Зәйнулла ишандар тураһында яҙған автор булараҡ әйтәм. Совет замандағы фекергә ышанып, күпме йәшәргә була? Ә ул фекер буйынса, Ғәбит менән Хәмит сәсәндәр мәҙрәсәлә һигеҙ йыл буйы уҡып, яҙырға ла өйрәнмәгән булып сыға. Йәнәһе, наҙан сәсәндәрҙән Мөхәмәтша Буранғолов килеп яҙып ала була. Быға ышаныуы ҡыйын. Мин үҙемдең “Ғабдулла Сәйеди” тигән художестволы әҫәремдә шул бушлыҡты тултырырға булдым. Белеүебеҙсә, сәсәндәр һәр саҡ берберегә менән аралашып йәшәгән. Мөхәмәтша Буранғоловтың эпосты Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән яҙып алыуы бик мөмкин. Әммә был хәл генә беҙгә эпостың нисек барлыҡҡа килеүен, нисек быуаттар дауамында йәшәп килеүен аңлата алмай. Әле сағыштырмаса күптән түгел, үҙған быуат башында ғына Муллаҡайҙа, Таулыҡайҙа, Бәләкәй Этҡолда сәсәндәр йыйылышып, ҙур, сәғәттәр буйына һөйләрлек әҫәрҙәрҙе көйләп башҡарыуы билдәле. Ул сәсәндәрҙең иң күренеклеләре белемде Муллаҡай мәҙрәсәһендә алған, йәғни мәҙрәсәлә үҙенсәлекле сәсәндәр мәктәбе ойошҡан. Сирек быуатҡа яҡын ваҡыт Бохарала уҡыған, ғәрәп, фарсы телдәрен, Шәреҡ әҙәбиәтен яҡшы белгән Ғабдулла Сәйеди, әлбиттә, боронғо эпик ҡомартҡылар менән дә таныш булған. Бер Әбүлҡасим Фирҙәүсиҙең “Шаһнамә” әҫәрен генә алһаң да, ул үҙ эсенә бик боронғо “Гильгамеш”, “Авеста” эпостарының бик күп сюжеттарын һыйҙырған бит. Ә хәҙер күп ғалимдарыбыҙ ул сюжеттарҙың “Урал батыр” менән уртаҡлығын иҫбатлап сығыш яһай. Ғабдулла Сәйеди иһә үҙ тирәһендә шәкерттәрен — буласаҡ сәсәндәрҙе күпләп туплап, уларға йүнәлеш биреп торған шәхес. Йәғни, “Урал батыр” ҙың беҙгә килеп еткән рәүеше Ғабдулла Сәйеди мәҙрәсәһендә тыуған, тиергә нигеҙ бар. Шуныһы күҙгә ташланып тора — беҙгә килеп еткәне “Урал батыр” эпосының бер бәләкәй өлөшө генә, сөнки унда күп нәмә әйтелеп бөтмәгәне, төшөп ҡалғаны күренеп тора. Беҙгә ифрат ҙур әйберҙең Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәр, Мөхәмәтша Буранғолов аша еткерелгәне генә билдәле. Йәнә, Ғәбит менән Хәмит мәҙрәсәлә һигеҙ йыл уҡып, яҡшы грамоталы кешеләр булған. Һәр хәлдә, ҡулында ҡәләм тотҡан. Эпосҡа Мөхәмәтша Буранғолов, аҙаҡ башҡа күренекле шәхестәр ҡул тейҙергән кеүек, был ике сәсән дә әҫәрҙең үҙ редакцияларын яҙыуы тәбиғи хәл, һәм бында хилафлыҡ юҡ. Минеңсә, “Урал батыр” эпосының барлыҡҡа килеү тарихын тәрәнерәк өйрәнә башлау кәрәк.*

* * *

Йәйҙең матур көндәрендә, ғәҙәттә, Муллаҡай мәҙрәсәһе, күрше ауыл мәҙрәсәләре менән берләшеп, йыл һайын Ҡолгөрәшкән яланына сәсәндәр бәйгеһенә сыға. Сылтырап аҡҡан тәмле һыулы шишмәле, түшәлеп ятҡан еләкле, шау сәскәле, тирә яғы һомғол ҡайындар менән уратып алынған был төбәк борон-борондан ошондай бәйгеләр үткәреү, уйнап-көлөп, күңел асыу урыны булған.

Борон-борон заманда Муллаҡай ауылында Ҡолмырҙа исемле бил бирмәҫ көрәшсе йәшәгән. Бер йыйында уға үҙенән ике тапҡырға ауырыраҡ кәүҙәле ҡаҙаҡ бәһлеүәне менән көрәшергә тура килгән. Тиңһеҙ көрәштә Ҡолмырҙаның ал бирмәҫ ҡаҙаҡты еңеүе тарихҡа инеп ҡалған. Еңеүсегә ырыу башлығы бер өйөр йылҡы бүләк иткән һәм иң сибәр ҡыҙҙы һайлап, кәләшлеккә биргән. Аҙаҡтан көрәшсе егет менән сибәр ҡыҙҙан Әмин, Сураш исемле ике батыр тыуа. Бөрйән ырыуы халҡы аҙаҡ Ҡолмырҙа батыр хөрмәтенә был урынды Ҡолгөрәшкән яланы тип атай. Тыуған яҡ тарихы менән ҡыҙыҡһынған шәкерттәр быларҙы яҙып алып, күптән мәҙрәсә китапханаһына һалып ҡуйған инде.

Уҙған йылдағы бәйгелә Таулыҡай мәҙрәсәһенең бер шәкерте “Буранбай” йырын башҡарып, барыһының һушын алғайны. Бер тауыштан беренселекте уға бирҙеләр. Былтыр уларға башҡорт халыҡ йырҙары менән ныҡ ҡыҙыҡһынған, шуларҙы йыйып, яҙып алып йөрөгән, Санкт-Петербург консерваторияһын тамамлаған Рыбаков Сергей Гаврилович атлы фольклорсы килгән булған. Таулыҡайҙар үҙҙәренә Икенсе Этҡол ауылының мәшһүр йыраусыһы Толомғужа Ғөбәйҙуллинды саҡырғандар. Шунда шәкерттәр боронғо йырҙарҙы күпләп өйрәнеп ҡалған икән.

— Бер йәш кенә урыҫ Икенсе Этҡолға, Таулыҡайға килеп, башҡорт халыҡ йырҙарын йыйып йөрөй, — тигәнде ишетеп ҡалғайны муллаҡайҙар. Был хәбәргә Ғабдулла хәҙрәт артыҡ илтифат бирмәгәйне. Бына нисек килеп сыҡты. Аҙаҡтан ул: “Шунда Ҡужәхмәтте лә ебәрһәм, ул да халыҡ йырҙарын күберәк өйрәнеп ҡалһа, ҡандай шәп булыр ине”, — тип үкенеп йөрөнө.

Муллаҡай мәҙрәсәһе алдағы йыл үтәсәк бәйгегә ныҡлап әҙерләнергә булды. Сәсәнлек бәйгеһендә улар мотлаҡ еңеп сығырға тейеш. Ғабдулла ишан күптән фекер төйнәп ҡуйған, шуны тормошҡа ашыра алһа, еңеү улар яғында буласаҡ, Аллаһ бирһә.

* * *

Ишетеп белеүенсә, Бөрйән ырыуы тарихи ҡобайырҙарға бай икән. Әммә хәҙергә улар ауыҙ-тел ижады кимәлендә генә йөрөй, әлегә тиклем уны яҙып алып, ныҡлап өйрәнеүсе булмаған. Бына шул ҡатламды аҡтарып, боронғо халыҡтың күңел ынйыларын йыйып, шәкерттәренә өйрәтергә һәм тарихта мәңгеләштерергә ниәтләй ул. Сана юлы төшөү менән Бөрйән яҡтарына барып сығырға йыйына, был хаҡта йыр-моңға, ауыҙ-тел ижадына әүәҫ биш-алты шәкертенә аңғартып та ҡуйҙы.

Ғабдулла Сәйеди иң башта Бөрйәнгә бер үҙе генә барҙы. Ундағы мәҙрәсәләргә, мәсеттәргә инеп, муллалар менән танышты, сәсәндәр менән осрашты. Икенсе тапҡыр барғанында үҙе менән йырҙар, ҡобайырҙар менән ҡыҙыҡһыныусы һәләтле шәкерттәрен дә алып барҙы. Улар төбәктең дастандарын, халыҡ йырҙарын яҙып алып ҡайтты. Бер барғанында йырсы Ҡужәхмәтте лә үҙе менән алды. Ул бөрйәндәрҙең “Әй-һәй-лүк” тигән бик матур йырын отоп ҡайтты. Был йыр шәкерткә шул тиклем оҡшаны, хатта аҙаҡ “Ҡөрьән” сүрәләрен ошо көйгә һалып көйләр булды.

Бөрйән иле торғаны тере тарих икән ул. Унда дастан әйтмәгән, көй һуҙмаған кеше юҡтыр. Бигерәк тә улар ифрат ҙур "Урал батыр", "Аҡбуҙат" кеүек ҡобайырҙарын ихлас бәйән итә. Уны ҡурай йә думбыраға ҡушылып та, көйгә һалып һамаҡлап та башҡаралар.

— Был тиклем ҙур ҡобайырҙарҙы хәтерҙә нисек һаҡлай алдылар икән? — тип хайран ҡалды ғилем эйәһе. Был һорауын урындағы сәсәндәргә лә бирҙе: — Дастандарҙың әлегә тиклем ҡулдан яҙылғаны, йә ташҡа баҫылғаны булдымы?

— Юҡ, хәҙрәт, булманы, — тине Ҡейекбай ауылынан килгән Баймырҙа сәсән. — Һуңғы ваҡытта үҙебеҙ ҙә шул турала уйлашып йөрөй инек.

— Улайһа, беҙҙең Муллаҡай мәҙрәсәһе шәкерттәрен ебәреп яҙҙыртып алырбыҙ. Баймырҙа сәсән, һеҙ шуға ризамы?

— Риза булмаған ҡайҙа ул. Әйттем бит, үҙем дә шул турала уйлап йөрөй инем.

Ошо көндән алып Ғабдулла Сәйеди ҡобайырҙарҙы яҙып алырға тотондо. Был эшкә үҙе менән алып килгән шәкерттәрен дә йәлеп итте. Тәрән һыулы Ағиҙелдәй һәлмәк ағылған моңдан арбалған Ғабдулла хәҙрәт ҡобайырҙарҙың һәр һүҙен яҙып алырға тырыша. Шәкерттәре Ғәбит, унан биш йәшкә кесе Хәмит менән Ишбулды ла яҙыуға харап маһир булып сыҡты. Улар ҙа Бөрйән сәсәндәре ауыҙынан сыҡҡан һәр бер һүҙҙе яҙып, теркәп барҙылар.

Донъя тарихын үҙ эсенә туплап һынландырған "Урал батыр" әҫәрен Ғабдулла Сәйеди болоттарға олғашҡан Урал тауҙарына оҡшатты. Тыңлаған һайын һоҡланыуы арта бара. Ниндәй ғәжәйеп ҡобайырҙар! Халыҡ ниндәйен рухи хазина тыуҙырған! Халыҡ хәтере барыһын ҡәҙерләп һаҡлап, түкмәй-сәсмәй бөгөнгө көнгә килтереп еткергән!

Ғилми мәркәзебеҙ иҫәпләнгән Бохарала уҡыған, Аллаһ йортона барып, хаж ҡылған, илдә бер булған мәшһүр ишандың тарих менән ҡыҙыҡһыныуы, бында килеп, барыһын текемләп яҙып алып ултырыуы урындағы сәсәндәрҙең күңеленә хуш килде. Улар хәҙрәткә быуындан быуынға ҡәҙерләп һаҡлап йөрөткән ҡобайырҙарын, ырыуҙары тарихын маңлай яҙып ултырып, һөйләп бирҙе:

— Был дастандар бик боронғо, улар беҙгә ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған аманат. Бөрйәндәр борон ҙур ырыу булып, Үҙәк Азияға хәтлем һуҙылған ерҙәрҙә йәшәгәндәр, — тип һөйләй башланы Баймырҙа сәсән. Уны Ҡобағош сәсәндең ейәне Әнүәр батыр күтәрмәләп алды:

— Минең олатайым ырыу тарихын яҡшы белгән дини кеше булған. Уның һөйләүе буйынса, беҙҙең сығышыбыҙ боронғо Үҙәк Азия төркиҙәренән. Ырыуыбыҙҙы буржандар тип йөрөткәндәр. Шунан ата-бабаларыбыҙ Һырдарьяның түбәнге ағымына һәм Арал буйына, иран, уғыр, бәшнәктәр араһына күсеп килгән.

Тарих яратҡан Ғабдулла Сәйеди быларҙы бик ныҡ ҡыҙыҡһынып тыңланы. Ул Әнүәр батырҙың артабан һөйләүен һораны:

— Аҙаҡ буржандар Азов буйы булғарҙарына ҡушылып киткән. Бөйөк Булғар иле тарҡалғас, Ҡөньяҡ Урал итәгенә, йәмле Ағиҙел буйҙарына килеп урынлашалар. Буржандар был ерҙәрҙе бик оҡшата. Улар ошонда, тау-урмандар араһында төпләнеп, әлегә тиклем әҙәм аяғы баҫмаған ошо гүзәл тәбиғәтле төбәктә мәңге ҡалырға һәм тыныс ҡына йәшәргә ҡарар итә. Буржандар — күпте күргән халыҡ. Шуға күрә уларҙың ижады ла бай...

Олатаһы Ҡобағош сәсәндән тарих тыңлап үҫкән Әнүәр барыһын хайран итте. Шәкерттәр уны көнө-төнө тыңларға әҙер ине. Бына ни сәбәпле ҡобайырҙарға ғәрәп, фарсы, иран телле һүҙҙәр килеп ингән икән! Ғабдулла Сәйеди иһә ҡобайырҙарҙа "Шаһнамә" һәм башҡа фарсы әҙәбиәте әҫәрҙәре менән оҡшашлыҡтар күп булыуына шундуҡ иғтибар итте. Был дастандарҙың

асылын тикшереп, төбөнә төшөү өсөн башта буржандарҙың тарихын өйрәнеү кәрәк. Ниндәй бөйөк халыҡ! Ошо тиклем ҙур дастанды телдән телгә һөйләп, беҙҙең көндәргә килтереп еткереү өсөн ниндәйен рухи көс кәрәк!

— Аҙаҡ был ҡобайырҙарҙы Һабрау сәсән отоп алып, әйтеп йөрөр булған. Ҡобағош олатайымдар ҙа ҡышҡы оҙон кистәрҙә йыйылышып, сыра ягып, ырыу тарихын һөйләп, гел ҡобайыр әйтеп ултыра торғайны. Шулай итеп, ҡобайырҙар бөтә башҡорт иленә таралды. Уны хәҙер ҡыпсаҡтар ҙа, түңгәүерҙәр ҙә, үҫәргәндәр ҙә, табындар ҙа әйтә һәм үҙҙәренеке тип иҫәпләй...

Ғабдулла ишан ҡобайыр һөйләүселәргә бик рәхмәтле булды һәм йәйгеһен уларҙы Ҡолгөрәшкән яланында үтәсәк сәсәндәр бәйгеһенә саҡырып ҡайтты.

Бынан һуң ошо эшкә әүәҫ шәкерттәр, остазы ҡушыуы буйынса, Бөрйән яҡтарында йыш булды. Ғәбит, Хәмит, Ишбулды исемле шәкерттәр бигерәк ихласлыҡ күрһәтте, улар ауыл һайын йөрөп, өйҙән-өйгә инеп, бар ишеткәндәрен яҙып алып йөрөнө. Дастандарҙы белеүе менән уларҙы бигерәк тә Аҡбулат ауылы хайран итте. Ҡайһы йортҡа инһәң дә, тарих һөйләйҙәр. Ғәҙелгәрәй, Ырғыҙлы, Ҡейекбай ауылында ла белмәгән йырҙары, әйтмәгән ҡобайырҙары юҡ. Ҡайһы йортҡа барып төшһәләр ҙә, беҙ бит муллаҡайҙар менән бер ҡәүем, ырыуыбыҙ ҙа, ҡошобоҙ ҙа, оранҙыбыҙ ҙа бер тип, ҡолас йәйеп ҡаршы алалар, табынға һый-хөрмәтен ҡуялар, аттарын тәрбиәләп, алдына һолоһон ултырталар.

Бөрйәндәр тарих һөйләүҙе ғәҙәттә Алдар батырҙан башлап китә. Алдар Иҫәнгилдиндың черкес батырын еңеп, Ҡырым-Азов походында ҙур батырлыҡ күрһәтеүе, Петр Беренсе батшанан тарханлыҡ ярлығы, алтын менән яҙылған көмөш ҡынлы һәм һаплы ҡылыс алып ҡайтыуы тураһында тасуирлап һөйләп бирәләр. Шунан ер-һыу исеме менән бәйле тарихҡа төшөп китәләр: береһе Урал батыр, икенсеһе Шүлгән мәмерйәһе, өсөнсөһө Йылҡысыҡҡан күле, дүртенсеһе Мәсем тауы тураһында бәйән итә. Шунан “Бабсаҡ менән Күҫәк” тарихына күсәләр.

Мәҙрәсәгә ҡайтҡас, ғәрәп, фарсы, төрки телдәрен, Шәреҡ әҙәбиәтен яҡшы белгән Ғабдулла Сәйеди Бөрйәндә йыйып алынған ауыҙ-тел ижадына бик яуаплы ҡараны, уны эшкәртеүгә үҙе етәкселек итте. Әҙәби ижадҡа һәләте булған барлыҡ шәкерттәрҙе йыйып алды. Оҙон ҡыш буйы шәкерттәр дәрестәрҙән һуң ҡобайырҙарҙы күсереп яҙыу, ятлау, көйгә һалып башҡарыу менән мәшғүл булды. Бигерәк тә Ғәбит менән Хәмит ихлас тотондо. Улар шул арала оҙон-оҙон “Урал батыр” ҡобайырҙарын ятҡа бикләп алды, нисә ҡараһаң да шуларҙы һөйләп, көйләп йөрөнө.

Бер көндө Муллаҡайға арбаһындағы ҙур һандыҡҡа китаптар тейәгән шағир Аҡмулла килеп сыҡты.

— Мифтахетдин ағай, ҡайһылай яҡшы иттең килеп! — тип уны ҡыуанып ҡаршы алды Ғабдулла хәҙрәт. — Һинең менән бик етди кәңәшләшергә кәрәк ине.

Аҡмулла яҙып алынған ҡобайырҙарҙы уҡып сыҡты һәм шәкерттәрҙең эшенән бик ҡәнәғәт ҡалды.

— Шәп эш башҡараһығыҙ, — тип хупланы. — Бында, ысынлап та, фарсы йоғонтоһо һиҙелә. Бөрйәндәр был ҡобайырҙарҙы Үҙәк Азияла саҡта уҡ әйтеп йөрөгәндәрҙер. Уралға килгәс, Шүлгән, Мәсем, Тарауыл һымаҡ исемдәрҙе бындағы ер-һыуға улар биргәндәрҙер, — тигән һығымта яһаны. — Ғабдулла туған, һин “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” ҡобайырҙарын яҙып алып, халҡыбыҙ өсөн бик ҙур изге эш башҡарғанһың. Телдән телгә күсеп, әйтелеп йөрөгән ижад бер саҡ онотолоп, юҡҡа сығыуы ихтимал, ә яҙылған, ташҡа баҫтырылған әйбер юғалмай, ул мәңгелек! Инде хаттаттарыңдан күсереп яҙҙырып, был ҡиммәтле хазиналарҙы халыҡҡа тараттыр. Аллаһ һинән риза булһын, туғаным!

Хушлашҡанда Аҡмулла бер нисә юллыҡ шиғырын әйтеп китте:

Ҡиткәндәр күпме ирҙәр гәүһәр сәсеп,
Уларҙың эштәренең юлы асыҡ.
Ғәжәйеп ҡиммәт әҫәр ҡалдырғандар,
Аҡылдың келәтенән шиғыр асып.

Мифтахетдин ағаһы менән һөйләшеп алһа, Ғабдулла ишандың кәйефе күтәрелә. Был юлы ла шулай булды. Аҡмулланың хуплауы уны ҡанатландырып ебәрҙе. Аллаһ бирһә, ҡобайырҙарҙы шәкерттәре Ҡолгөрәшкәндә, йәйгеһен сәсәндәр бәйгеһендә башҡарыр. Мөхәммәтсадиҡ байға әйтеп, Ғәбит менән Хәмиткә үлсәтеп, бәйгелә кейергә махсус кейемдәр тектертергә кәрәк булыр. Шул ике шәкертенә күҙ терәп тора, булдырырҙар, ал бирмәҫтәр, Аллаһ теләһә. Тауыштары көслө. Әйткәндәй, хәҙрәт шул ике шәкертенең киләсәген күҙаллаһа, уларҙың данлыҡлы сәсән булырын күрә. Улар башҡорт илендә ошо “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” ҡобайырҙары менән дан тотор, иншалла.

Бына июнь айы ла етте. Тәбиғәттең иң хозур, шау сәскәгә күмелгән сағы. Ҡолгөрәшкән яланы халыҡ менән тулы. Ҡобайыр тыңларға, сәсәндәр бәйгеһенә быйыл яҡын-тирә ауылдарҙан да күп килгәндәр.

Башта йыйында, ғәҙәттәгесә, ат сабышы булды, унан көрәш башланды. Бына, ниһайәт, сәсәндәр бәйгеһенә лә сират етте. Иң башта оло быуын сәсәндәре сығыш яһап, тыуған ерҙе, Һаҡмар йылғаһын, Ирәндекте, батырҙарҙы данлап, ҡобайыр әйтте. Шунан Ҡужахмәт сығып, “Әй-һәй-лүк” те йырлап ишеттерҙе.

Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға
Шыҡыйып та осоп талсыға, әй-һәй-лүк.
Егет кенә булһаң, ай, сәсән бул,
Сәсәнлектәр менән дан сыға, әй-һәй-лүк.

Бер аҙҙан баштарына уҡа таҫма менән биҙәлгән йәшел түбәтәй, аяҡтарына иләгән күндән тегелгән ҡупшы итек кейгән, сигеүле күлдәктәрен биҙәкле билбау менән быуған ике шәкертте саҡырып сығарҙылар.

— Йәш башҡарыусылар Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтов! Муллаҡай мәҙрәсәһе шәкерттәре! — тип таныштырҙы уларҙы бәйгене ойоштороусы Иблиәмин хәлфә. Мөхтәрәм йәмәғәт, хәҙер улар “Урал батыр” ҡобайырын әйтеп ишеттерер.

Ҡужахмәт ҡурайын һыҙғыртып ебәреүгә, ҡаштары бөркөт ҡанатындай сөйөлгән, ҡара күмерҙәй ҡап-ҡара күҙҙәре илаһи нур бөрккән Ғәбит шәкерт уға ҡушылып һамаҡлай ҙа башланы:

Борон-борон борондан
Кеше маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын...

Ҡобайырҙың күләме ҙур булыу сәбәпле шәкерттәр башта уҡ сиратлап, бер-береһен ял иттереп һөйләргә булғайны. Бына кәүҙәгә Ғәбиттән күпкә ҡайтышыраҡ, ҡаҡса ғына йөҙлө Хәмиткә сират етте. Үҫмер думбыраһын думбырлатып алды ла, башланы ҡобайыр ҡойорға:

Урал уңға киткән һуң,
Оҙон юлға төшкән һуң,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти,

Күп тауҙарҙы ашҡан, ти.
Бара торғас, бер тауҙың
Итәгенә еткән, ти...

Ҡобайырҙы гел бер көйгә көйләп, тыңлаусыларҙы ялҡытмаҫ өсөн, башта уҡ шәкерттәр бер нисә көй һайлап ҡуйғайны. Көйҙәр әҫәрҙең йөкмәткеһе менән ҡушылып, уның мәғәнәһен көсәйтте, тыңлаусыларҙы илһамландырып, барыһын сер донъяһына алып инде. Кешеләр берсә яуыз көстәргә нәфрәтләнде, берсә Уралдың батырлығына һоҡланды. Һомай менән Уралдың ҡауышыуын зарығып көттө. Бына, ниһайәт, үлем күрә алмай ҡаңғырып йөрөгән меңйәшәр ҡарттың әйткәненә лә барып еттеләр:

Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Донъяла мәңге ҡалыр эш:
Ул да булһа яҡшылыҡ.
Күккә лә осор яҡшылыҡ,
Һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ...

Был тамаша бар халыҡтың, килгән ҡунаҡтарҙың иҫен-һушын китерҙе. Барыһының телендә Ғәбит менән Хәмит шәкерт исеме ине. Йәш ҡыҙҙар уларға ғашиҡ булып, сәскәләр бүләк итте.

— Былар, ни, Мәскәүгә батша ҡырына йәйәүләп барған Мәхмүт сәсәндән кәм түгел дәһә, — тине Миҙҙәтғәле старшина. — Хатта ағайҙары Ишмөхәммәт сәсән Мырҙаҡаев был тиклем итеп ҡобайыр әйтә алғаны юҡтыр!

Атанғол ауылы старшинаһы Миҙҙәтғәле Мәтинов ике үҫмергә лә йүгән тотторҙо.

— Үҙегеҙ барып, йәйләүемдән аттарҙың оҡшағанын һайлап алығыҙ, — тине.

Таулыҡай мәҙрәсәһенең өлкән мөдәррисе Хәлил хәҙрәт Рәхимов та бындай ҙур аһәңле ҡобайырҙы ишетеп хайрандар ҡалды, хатта күҙҙәренә йәш алды:

— Бисмилләһи, мәшаллаһ, ай-ба-а-ай, был хәтлене күргән юҡ ине, әлхәмдүлиллә шөкөр! Йыйынды ҙурланығыҙ. Муллаҡай мәҙрәсәһе ысынлап та торғаны сәсәнлек мәктәбе икән дәһә. Бынауындай оло дастанды ҡайҙан табып яҙып алдығыҙ? — Өлкән мөдәррис тә буш ҡул килмәгән икән, егеттәргә Бохаранан алып ҡайтҡан, алтын менән нағышлап яҙылған Ҡөрьән китабын бүләк итте. — Ваҡыт аша күреү һәләтенә эйә әһел өҫтәп ҡуйҙы:

— Иманым камил, киләсәк быуындар был ҡобайырҙың тарихын тағы ныҡлабыраҡ өйрәнер. Башҡорт халҡының иң боронғо, иң бөйөк дастанын ҡәҙерләй белерҙәр, мең йыл үтһә лә онотмаҫтар, иншалла. Әлегә тиклем был ҡобайырҙың айырым киҫәктәре генә телдән телгә күсеп һөйләнелеп килгән. Муллаҡай мәҙрәсәһе мөғәллимдәре һәм шәкерттәре шул киҫәктәрҙе бергә йыйып, яҙып алды. Хәҙер яҙып алынғас, Ырымбурға алып барып, ташҡа баҫтырырға кәрәк. Ташҡа баҫылған яҙыу бер ваҡытта ла юғалмай.

Шәкерттәрҙең башҡарыу оҫталығына хайран ҡалған Бөрйән ҡунаҡтары ла үҙ һүҙен әйтергә ашыҡты. Баймырҙа сәсән алғараҡ сығып баҫты:

— Рәхмәт, уландарым, — тине ул. — Бөгөн һеҙ “Урал батыр” ҡобайырын данлап ҡына ҡалманығыҙ, үҙегеҙҙе башҡорт иленә сәсән итеп тә таныттығыҙ. Бынан ары һеҙҙе Ғәбит сәсән, Хәмит сәсән тип атап йөрөтөрҙәр. Ғабдулла шәйехкә лә рәхмәтебеҙ ҙур. Оло башын кесе итеп, Бөрйән менән Муллаҡай араһына саң

төшөрмәйенсә, ҡат-ҡат килеп, ҡобайырҙарҙы яҙҙырып алды, шәкерттәренә уны өйрәтте, инде халҡыбыҙға тарата. — Баймырҙа сәсән дә, йыйынды ҙурлап, бүләк менән килгән икән. Шәкерттәргә ул бүре, Ғабдулла ишанға шәшке тиреһенән тегелгән бүректәр кейҙерҙе.

— Беҙ бит, бөрйәндәр, сәсәндәр генә түгел, һунарсылар ҙа, — тип шаяртып ҡуйҙы ул аҙаҡтан.

Бәйгенән һуң ҡунаҡтарҙы мул итеп әҙерләнгән һый-хөрмәт көтә ине. Бында ла һүҙ "Урал батыр" ҡобайыры хаҡында барҙы.

Уландары сәсәнлек бәйгеһендә ҡатнашмағаны өсөн Шакир менән Закирҙың атаһы Рәмиев Мөхәммәтсадиҡ байҙың эсе көтөрләне, шикелле:

— Шәйех эфәнде, беҙҙең малайҙарҙы ни эшләттең? Үҫкәс мәғдәнсе булырҙар, тиһәм, шиғыр яҙып тик ултыралар. Бигерәк тә Закиры ҡаныҡҡан, хәҙер уныһына ҡул һелтәнем. Ул баланан йүнле әҙәм сыҡмаҫ инде. Бер ҡараһаң, сығатай әҙәбиәте менән мауыға, икенсе ҡараһаң, Баҡырғани, Йәссәүи, Рабғузи, Науаиҙарҙың робағиҙарын ятлай. Дәфтәр тултырып шиғыр яҙа. Ә үҙе бөгөнгө бәйгелә ҡатнашырға ла эшкинмәне, — тип үпкәләгәндәй итте.

— Улығыҙ әҙәби ижадҡа бик һәләтле. Аллаһ уны шағир итеп яралтҡан. Сәсәнлек менән шағирлыҡ ныҡ ҡына айырыла. Байлыҡ бер айлыҡ, ти. Аллаһ насип итһә, киләсәктә улығыҙ шул Науаиҙар кеүек данлыҡлы шағир булып китер. Үҙегеҙ ғорурланып йөрөрһөгөҙ.

— Шулаймы, хәҙрәт? Улайһа, ни, әйҙә, яҙышһын! — Абруйлы остаздың улын ҙурлап маҡтауына Мөхәммәтсадиҡтың күңеле булды. Ғабдулла Сәйеди һүҙен елгә ташлай торғандарҙан түгел. Иншалла, Закир улы булыр шағир. Ана, Шакирын мәғдәнсе итһә, шул етер.

— Ярҙам кәрәкһә, өндәшегеҙ, — тине сауҙагәр. — Һеҙҙең мәҙрәсә беҙҙең өсөн Аллаһ йорто. Унда юғарынан ебәрелгән илаһи нур балҡый. Һеҙҙе улдарыбыҙ пәйғәмбәр урынына күреп, хөрмәт итә, сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

Ғабдулла Сәйеди үҙе лә был аҡыллы, булдыҡлы, хәстәрлекле әһелде бик ихтирам итә. Әҙәп-тәүфиғы хаҡ мосолмандарса, баймын тип аҙып-туҙып йөрөмәй. Мәҙрәсәгә бихисап ярҙамы тейҙе. Йомарт булғанға ла Аллаһ байлығын уға күпләп бирәлер инде.

Шулай итеп, яңы егет ҡорона инеп барған Ғәбит Арғынбаев менән йәш үҫмер Хәмит Әлмөхәмәтов быйылғы бәйгенең еңеүселәре тип табылды. Уларҙы ошо йыйында уҡ Ете ырыу йыйыла торған Айҙаболон тигән ергә, Бөрйән ырыуы сәсәндәре бәйгеһенә саҡырҙылар.

Башҡарған эштәренән ҡәнәғәт ҡалған өлкән мөдәррис:

— Был саҡырыу "Урал батыр" ҡобайырын мәңгеләштереү йәһәтенән тағы бер аҙым булыр. Бөйөк эҫәр беҙҙең мәҙрәсәнән барлыҡ халҡыбыҙға еткерелер, иншаллаһ! — тине.

Аҙаҡтан Муллаҡай мәҙрәсәһенән Дәрдмәнд атлы бөйөк шағир сыҡты. Ул Мөхәммәтсадиҡ байҙың теге шиғыр яратҡан, "эшкинмәгән" улы Закир Рәмиев ине. Икенсе Эҭкол ауылынан Шәһәрғәзи Ғәбдиев тигән данлы сәсән дә Муллаҡай мәҙрәсәһе шәкерте. Үлән бер үҫкән еренә үҫә, ти. Ҡырҡ йылдан ашыу имам хатип, өлкән мөдәррис булып торған арала был мәҙрәсәнән бихисап сәсәндәр, шағирҙар сыҡты. Халыҡ араһында мәҙрәсәнең "Муллаҡай — сәсәндәр мәктәбе" тигән даны ана шулай таралды.